*Мөнир ҠУНАФИН*

# Изгеләрҙән изге һыу



## Шишмәләр аҙым һайын да...

Һыу! Изгеләрҙән изге һыу, йәшәү сығанағыбыҙ беҙҙең! Яҡты донъяла кешелектең иң ҙур байлығы ул. Ғәҙәти фани көнөбөҙҙө беҙ һыуһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ, һыуға шул тиклем өйрәнгәнбеҙ, хатта тормошобоҙҙа ул шундай әһәмиәткә эйә икәнде уйламайбыҙ ҙа, буғай. Кеше тәненең 70 проценты һыуҙан тороуын күптәр белмәйҙер әле; әйтәйек, кеше ауырлығы 70 килограмм икән, ә унда һыу — 50 литр! Кеше ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапмайынса айҙар буйы йәшәй ала. Ә һыуһыҙ? Эйе шул, өс көнгә, күп булһа бер аҙнаға түҙергә булалыр. Ғәҙәттә кеше көнөнә 2—3 литр һыу эсә. Тик ниндәй һыу эсергә һуң? Медиктар, һис ҡасан да крандан һыу эсмәгеҙ, ул ҡурҡыныс, тип оран һала. Һәм улар хаҡлы ла. Торбанан килгән һыу эшкәртелә, хлорлана. Хлор аяуһыҙ микробтарҙы юҡ итһә лә, атеросклероз тыуҙырыуға ла сәбәпсе, ашҡаҙанға һәм эсәктәргә тәьҫир итеүсе ағыу ҙа ул. Ҡыҙғаныс, әлбиттә, ләкин факт: беҙҙең илдә торбанан аҡкан һыуҙың санитар-химик күрһәткестәре буйынса — һәр өсөнсө, санитар-бактериологик күрһәткестәре буйынса һәр унынсы пробаһы гигиена талаптарына яуап бирмәй. Эсер һыу һаулыҡҡа хәүефле матдәләрҙән һәм бактерияларҙан таҙартылыуға ғына түгел, ә шулай уҡ файҙалы минералдарға ла (аҙыҡҡа ҡарағанда, һыу менән улар организмда һәйбәтерәк үҙләштерелә) бай булырға тейеш. Иң ябай һәм осһоҙ юл — крандан аҡкан һыуҙы көнкүреш фильтрҙары менән таҙартыу, әлбиттә. Ләкин ул да организмға кәрәкле матдәләрҙе бирә алмай. Һау-сәләмәт булайыҡ, оҙаҡ йәшәйек тиһәк, унын юлы анһат, Башҡортостанда бигерәк тә. Сөнки беҙҙә сыҡҡан тәбиғи минераль һыуҙар шифаның үҙе, улар беҙҙең сарсауҙы ғына ҡәнәғәтләндереп ҡалмай, шлактарҙы сығара, организмды һауыҡтыра.

Мең йыл йәшәгән бер әҙәмдең яҙғандары хаҡында ишеткәнегеҙ барҙыр. Кипкән әҙәм баш һөйәге янында тапҡандар ул яҙыуҙарҙы. Унда былай тиелгән имеш: ”Мин фәлән кешенең фәлән улы инем. Мең йыл ғүмер һөрҙөм, мең бина ҡорҙом, мең зина ҡылдым. Мең ғәскәрҙе еңдем, мең бәхеткә тейендем. Ахырҙа шундай бер заманға юлыҡтым: бер янсыҡ алтынға бер һыныҡ икмәк менән бер сүмес һыу таба алманым. Унан һуң бер тубал гәүһәргә бер ҡабым икмәк менән бер йотом һыу алы-

шыусы тапманым. Шунан алтындарым, гәүһәрҙәремде он итеп тарттым да, бына һеҙ күргән хәлгә килдем.

Был донъяла бер һыныҡ икмәге һәм эсер һыуы булып та үҙен бәхетһеҙ һанаған кеше аҡылһыҙ”.

Әкиәтме был, хикмәтме, ләкин уның эсендә — хәҡиҡәт. Беҙ, башҡортостанлылар, был йәһәттән бәхетлебеҙ, тим. Өҫтәлебеҙҙә — икмәгебеҙ, шишмәләребеҙҙә эсер һыуыбыҙ бар.

Иҫләйһегеҙҙер әле, тиҫтә йыл элек кенә магазиндарыбыҙ кәштәләрен ”Нарзан”, ”Боржоми”, ”Ессентуки” кеүек Ҡафтау артынан килтерелгән һыуҙар биҙәне. Уларҙы кешеләр бик алып та барманы, быяла шешәләр саңға батып ултырҙы. Күрһәң, шул дауахана тирәһендә, йәғни сирлеләрҙең тумбочкаһында ғына күҙгә салыныр ине. Һуң, шул саҡта үҙебеҙҙең һыуҙар шифаһы тураһында уйлап ҡараманыҡмы икән ни? Уны нисек халыҡҡа еткерергә, сит тарафтағылар беҙҙекенән нимәһе менән шифалыраҡ, нимәһе менән ымһындырғыс? ”Ер ҡуйынынан аҡҡан һыу, ана, аға бирһен, кем теләй — килһен дә алһын. Беҙҙә ундай шишмәләр — аҙым һайын”, — әллә шундай ғәмһеҙ ҡараш, булғанды ҡәҙерләп ҡабул итә белмәү сире был турала уйларға форсат бирмәнеме? Ни тиһәң дә, торғонлоҡ осоронда милли рух, ер-һыу ҡәҙере етеңкерәмәне шул.

Үҙ ерен мөкиббән яратҡан, дарманлы, эшҡыуар егет менән танышҡас, ошо уйҙар солғаны. Дөрөҫөрәге, уның бер хәлде иҫкә төшөрөүе һәр ялтырауыҡты алтын тип күҙ бәйләгән саҡты хәтерләтте.

— Бынан тиҫтә йылдар самаһы элек үҙемдең тыуған яҡтарыма, Ғафуриға, ер-һыу күрһәтергә, үҙебеҙҙең яҡтың хозурлығы, кешеләре менән таныштырырға тип Көньяҡ Кореянан килгән дуҫтарымды алып ҡайттым, — тип һөйләй яңы танышым. — Данлыҡлы ”Красноусол” шифаханаһы тарафтарына юлыбыҙ төштө. Ҡунаҡтарҙы билдәле 12-се сығанаҡҡа ла алып барҙым. Дуҫтарымдың береһе шишмә менән танышып сыҡты ла, башын тотоп, ай-вай-вай, тине. Беҙҙәге мөғжизәгә таң ҡалды был, тип уйлайым. Теге кеҫәһенән калькуляторын килтереп сығарҙы ла, секунд эсендә шунса-шунса аҡса аға, ай-вай, ти. Ысынлап та, 12-се сығанаҡта секундына 40-60 литр һыу атылып сыға. Их, беҙҙә

*”Красноусольск” минераль һыу табыу һәм ҡойоу заводы Рәсәйҙең ун һигеҙ төбәге менән уңышлы хеҙмәттәшлек итә*



быҙдай байлыҡ булһа икән, тип ҡуйҙы Кореянан килгән дуҫым. Ә халҡыбыҙ, ошондай сығанаҡтар була тороп, крандан хлорлы һыу эсә, тип уйланым мин шул саҡ. Бына ошо була ул ”аяҡ аҫтындағын ярты быуат эҙләгән” тигән әйтемдең асылы.

Бөгөн бында урынлашҡан ”Красноусольск” минераль һыу табыу һәм ҡойоу заводы” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте халыҡты үҙебеҙҙең шифалы һыу менән тәьмин итә. Һыу 12-се сығанаҡтан полиэтилен торбалар аша, хатта һауаға ла ”теймәй”, туп-тура заводҡа килә һәм өс фильтр, бактерицид лампа аша үтеп, газландырылып, пластик шешәләргә тултырыла. Сығанаҡтан һыуҙы туп-тура алған берҙән-бер завод был. Күптәр айырым һауыттарға, мискәле машиналарға тейәп ташыйҙар, ул саҡ һыуҙың составы ла үҙгәрә, ҡәҙере лә кәмей. Бәлки, шуға ла ”Красноусольская” һыуын ышанып алаларҙыр, юҡҡа ғына уны йәшәү бүләк итеүсе һыу тип атамайҙарҙыр. ”Красноусольск” минераль һыу табыу һәм ҡойоу заводы” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте — бөгөн Башҡортостанда минераль һыу етештереүсе предприятиелар араһында иң эреһе һәм иң ҡеүәтлеһе. Бер сәғәт эсендә завод 2 мең 500 шешә һыу етештерә, ә айына 1 миллион 800 мең, йәғни 2 миллион 700 мең литр һыу һатыуға сыға. ”Иң мөһиме — үҙ һыуыбыҙ үҙ халҡыбыҙға барып етә. Төп маҡсат ошо ине”, — ти йәмғиәттең директорҙар советы рәйесе, ҡасандыр тыуған яҡтарына Кореянан дуҫтарын алып ҡайтҡан Азат Фәйзуллин.

### Талап ҡуйғас, шарт та тыуҙыр

Ижад йәшәтә донъяны. Һәр эштә, һәр өлкәлә эҙләнеү фарыз. Эҙләнеү үҙе үк хәрәкәт бит, уның артынан, белеүегеҙсә, килә бәрәкәт. ”Красноусольск” минераль һыу табыу һәм ҡойоу заводы” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең эшмәкәрлеге менән танышҡас, шулай тип ҡуям.

— Ғаилә именлеге нимә ул? — тип тормошсан һорау менән башланы һүҙен йәмғиәттең генераль директоры Юрий Сизинцев. — Эйе, матди ихтыяжынды ҡәнәғәтләндерерлек эш хаҡы, эсмәгән ир һәм баш өҫтөңдә ел-ямғыр үтмәҫлек ҡыйыҡ та, өҫтәлдә — икмәк.

— Аҡыллы ҡатын да, йүгереп, донъя шаулатып уйнап йөрөгән балаСаға, тип тә өҫтәйек, — мыйыҡ аҫтынан йылмайып һүҙгә ҡушыла уның урынбаҫары Салауат Йосопов. — Ғаилә имен икән, ил дә ҡеүәтле, донъя ла тыныс. Беҙҙең йәмғиәт шуны күҙ уңында тотоп эшләй ҙә.

*Эшкә бында бик яуаплы ҡарайҙар*



Үткән йыл аҙағында ғына эш башлаған был предприятие Ғафури районында ғына түгел, хәҙер республикала ла алдынғыларҙан иҫәпләнә. Бөгөн ҡулланыу баҙарында ”Красноусольская” минераль һыуына ихтыяж ҙур. Республикабыҙҙың һәр төбәгендә ”Красноусольская” яҙыулы һыу

шешәләрен күрергә мөмкин. Предприятие, Башҡортостандан тыш, Рәсәйҙең ун һигеҙ төбәге менән уңышлы хеҙмәттәшлек итә. Ҡара диңгеҙ буйында ял итеүсе бер яҡташымдың, ”Сочиҙа ”Красноусольская” һыуын күреп, таң ҡалдым, үҙемдең бер туғанымды осратҡандай булдым”, тип һөйләүе үҙе бер шатлыҡ бит. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа сит тарафтарҙа Башҡортостан балына, бензинына ғына түгел, хәҙер минераль һыуына ла иғтибар артҡандан-арта бара. Уның сәбәбе һыуҙарыбыҙҙың шифалығына ғына бәйле түгел, ә лайыҡлы тауарҙы лайыҡлы рәүештә тәҡдим итә белеүҙә лә икән. Реклама, менеджерҙар мәктәбенең көслө булыуында. Ғафури районындағы әлеге предприятие һыу ҡойор, халыҡҡа сығарыр алдынан XVI быуатта уҡ дауалау сифаттары менән билдәле булған 12-се сығанаҡтың шифалығын рекламалау менән шөғөлләнә, уның дауаһына кемдәр, ҡайҙа мохтажлыҡ кисерә, сауҙа селтәрен ҡайҙа йәйелдереү уңайлы — шуларҙы өйрәнә һәм шунан ғына эш башлай. Әйтеүе генә еңел, 8 ай буйы 10 кешенән торған тәжрибәле менеджерҙар коллективы бөтә Рәсәй баҙарын ”һөҙөп” сыға. Беҙҙә, ғәҙәттә, төптән уйламайынса эшләү арҡаһында, банкротлыҡ упҡынына тәгәрәүселәр ҙә етерлек. Әлеге предприятие асылыуы эшһеҙлектән йонсоған ауыл халҡы өсөн икеләтә шатлыҡлы. Бында ҡырҡҡа яҡын яңы эш урыны булдырылды. Коллектив тотороҡло, эштән китеүселәр юҡ. Сөнки барыһы ла ғаилә именлеге, ил ҡеүәте өсөн эшләнә. Берҙән, эш хаҡы ваҡытында түләнә. Ә ул уртаса биш мең һумға яҡын. Ауыл халҡы өсөн был аҙ түгел. Икенсенән, тәртип бик ҡаты. Ә ҡапҡа артында, килгән ғаризалар буйынса ғына, өс йөҙҙән ашыу кеше эш биреүҙе көтөп тора.

Сәләмәт тормош һәр саҡ алға ҡуйыла бында. Яңыраҡ завод тәмәке тартыуҙы ташлаусылар араһында конкурс үткәргән. Бер ай буйы тәмәке тартмаған, йәғни үҙендә ирек көсөн тойған хеҙмәткәрҙәргә бүләккә һыуытҡыс, телевизор, саңһурҙырғыс ҡуйылған. Тәүге мәлдә конкурста ҡатнашыусылар ярайһы уҡ була, тик финиш һыҙығына бары өсәү генә барып етә. Шуныһы һөйөнөслө — бөгөн улар, еңеүселәр, бөтөнләй тартмай. ”Тәмәке ташлау байрам икән ул. Уның ҡоллоғонан ҡотолоу ниндәй бәхет икәнен белһәгеҙ. Ул мәлдә бүләк алыр өсөн ташлаған булһам, бөгөн мин тәмәкене бүләкһеҙ ҙә ташлар инем. Һеҙ ҙә ташлағыҙ, егеттәр, яңынан тыуғандай булырһығыҙ!” — тип һөйөнөп һөйләй еңеүселәрҙең береһе.

— Тәртиптең ҡаты ҡуйылыуы аңлашыла ла. Ҡайҙа тәртип һәм эшкә айыҡ ҡараш — шунда еңеү-уңыш, шунда матур йәшәүгә ынтылыш. Хеҙмәткәрҙәребеҙ эшкә дәртләнеп килә. Һәм шуныһы ҡыуандыра — эсмәгән егеттәрҙең ғаиләһендә тормошо яйлы, донъя көтөүендә аҙымдары ырамлы, — тип һөйләй үҙе шиғри күңелле директор урынбаҫары Салауат Мөхәммәт улы.

Хеҙмәткәрҙәрҙән эш талап иткәс, шарттар ҙа тыуҙыра бел. Предприятиела заманса ҡорамалдар урынлаштырылған. Ҡул көсө аҙ файҙаланыла, күп эште автоматика башҡара. Туҡланыу, кейем алмаштырыу бүлмәләре булдырылған. Эштән һуң душта ҡойоноп алыу мөмкинлеге лә бар. Завод ҡасабанан ситтә урынлашыу сәбәпле, предприятие ”Газель” микроавтобусы һатып алған. Ул бер смена эшселәрен (бында эш тәүлек әйләнәһенә өс сменала бара) өйҙәренә илтһә, бер үк ваҡытта икенсе сменалағыларын йыйып та ала.

Яңы тупланған коллектив булараҡ, бында күбеһенсә йәштәр эшләй. Ә йәштәрҙең, билдәле, күбеһе торлаҡҡа мохтаж. Ошоно иҫәпкә алып, Төҙөкләндереү йылы булыуын күҙ уңында тотоп, завод етәкселеге үҙ эшселәренә торлаҡ һатып алыуға йә шәхси төҙөлөшкә процентһыҙ ташламалы ссуда бирергә ҡарар иткән. Ссуда предприятие алған килемдән тупланған аҡса иҫәбенән биреләсәк. Был яңылыҡ йәштәрҙең күңелдәрен тағы ла күтәреп ебәрҙе. Уларҙың ҡайһы берҙәренең һорауы буйынса, уҡырға инер өсөн дә ссуда биреү мәсьәләһе өйрәнелә. Завод етәкселеге, тимәк, тағы ла эҙләнеү юлында. Ҡыҫҡаһы, улар бындай алымдар менән тырышыбыраҡ эшләргә дәртләндереп, ҡеүәтләп кенә ҡалмай, ә социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә лә булышлыҡ итә. Әлегә бындай яңылыҡ Ғафури районындағы бер генә предприятела ла, ойошмала ла юҡ.

## Рәхмәтле һыу — илаһилыҡ билдәһе

Яңыраҡ ”Рәсәй” каналында күрһәтелгән ”Великая тайна воды” тапшырыуы кешелектең һыуға, ғөмүмән, донъяға булған ҡарашын үҙгәртте тиһәм, хаталанмамдыр. Һыуҙың хәтере булыуы, уның тере йәнле организм кеүек тойоуы, уйлай белеүе хайран итте. Шундағы бер миҫалды ғына иҫкә төшөрөп үтәйек. Өс стаканға бер сама дөгө ярмаһы һалып, һәр береһенә тигеҙ генә итеп һыу ҡоялар һәм бер бүлмәгә ултырталар. Тимәк, шарттар бер үк. Бер кеше көн дә һәр һауыттағы һыуға үҙ мөнәсәбәтен белдерә. Беренсе стаканға ул ”рәхмәт” тип өндәшә, икенсеһенә ”мин һине күрә алмайым” тип белдерә, ә өсөнсөһөнә бөтөнләй иғтибар ҙа итмәй. Бер айҙан һуң ғәжәп күренешкә тап була тәжрибә үткәреүселәр: тәүге ”рәхмәтле” һауытта һыу, донъяға һөйөнөп, ҡайнап ултыра, ”ҡыйырһытылған” һыулы стакандағы дөгө бөртөктәре, мөхәббәтһеҙлеккә һәм мәрхәмәтһеҙлеккә түҙә алмай... ҡап-ҡара булып ”көйгәйне”. Ә өсөнсөһө — ғәмһеҙлек, битарафлыҡ һөҙөмтәһе тағы ла тетрәндергес — уны мүк ҡаплағайны... Йә, шунан һуң һыу ишетмәй, тоймай, белмәй тип кем әйтә ала?

Ошо тапшырыуҙы ҡарағандан һуң ата-бабаларыбыҙҙың аҡылына тағы бер тапҡыр баш эймәү мөмкин түгел. Улар бит быны күптән белгән. ”Эскән һыуға төкөрмә”, ”Эскән ҡоҙоғоңа рәхмәт әйт”, ”Һыуҙы бисмилла итеп эс” — бына был мәҡәлдәрҙә күпме аҡыл, быуаттар буйына килгән тормош тәжрибәһе һалынған. ”Ҡояш байығас һыуға бармайҙар, зәхмәт ҡағылыр”, ”Сүпте йылға буйына түкмәгеҙ, һыу инәһе асыуланыр”, ”Йыуынты һыуығыҙҙы кеше аяғы баҫмаған ергә түгегеҙ”, ”Ҡойонғанда, йыуынғанда, һыуыбыҙ, сихәттәремде алып кит, миңә көс бир, тип теләгеҙ”, ”Һыуҙы ағым ыңғайына ғына алығыҙ” — олатайөләсәйҙәрҙең өгөт-нәсихәттәре тик изгелек, һыуҙың ҡәҙерен белергә саҡыра. Төшкән килендәрҙең шишмәгә көмөш тәңкә һалып рөхсәт һорауы һыуҙың бөйөклөгө тураһында һөйләйҙер. Ғөмүмән, башҡорттар таныш түгел инештән эсер алдынан унда көмөш тәңкә йә еп һалған. Күңеленән һыуҙан рөхсәт һораған. Ә башҡорт халыҡ ижадында үлгәнде терелткән, ҡартты йәшәрткән, ауырыуҙы һауыҡтырған, һауҙы үлемһеҙ иткән тере һыу тураһында әҙ һөйләнеләме?! Һыуҙың һирәк осрай торған үҙенсәлектәргә эйә булыуы бәхәсһеҙ — был турала башҡорттар борондан белгән. Үле һыу башта бөтә нәмә нисек булғанын хәтерләй,

тере һыу тормош нисек барырға тейешлеге тураһында мәғлүмәт бирә — әкиәттәрҙә лә, тормошта ла шулай түгелме ни?

"Урал батыр" эпосында хәл өҫтөндә ятҡан Урал батырға халыҡ терек-лек һыуын тәҡдим иткәс, ул һыуҙы уртлай ҙа, бер тамсыһын да йотмай, бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап: "Мин бер кеше, һеҙ күп кеше. Мин түгел, ә ер-һыу үлемһеҙ булһын, ерҙә кешеләр шат-рәхәт йәшәһен!" — тип, тирә-яҡҡа бөркөп ебәрә. Дүрт мең йыл элек ижад ителгән был эпос башҡорт халҡының борондан тыуған ергә ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеүен, һаҡсыл ҡараштა булыуын дәлилләй.

Быйыл ғинуар айында "Красноусольск" минераль һыу табыу һәм ҡойоу заводын асыу тантанаһында Азат Фәйзуллиндың:

— Халыҡ ижадында Урал батыр халыҡҡа тере һыу бөрккән. Беҙҙең тормошобоҙҙа, тарихыбыҙҙа һәр дәүерҙә, һәр быуатта Урал батыр бул-ған, бар һәм буласаҡ. Беҙҙең заманыбыҙ Йәншишмәнән услап алып, тирә-яҡҡа тере һыу һибеүсе Мортаза Рәхимовтың булыуы менән бәхетле, — тип әйтеүен халыҡ ҡул сабып ҡаршы алды. Тантанала ҡатнашыусы аб-руйлы ҡунаҡ — Хөкүмәтебеҙҙең Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов, Азат Фәйзулла улына ҡарап, һыу табыу һәм ҡойоу заводында заман һулышын тойған, эшлекле, алдынғы ҡарашлы ғына түгел, ә шағир күңел-ле, образлы фекерләүсе егеттәрҙең эшләүе шатландыра, тип ҡуйҙы. Ысынлап та, быуат башында Президентыбыҙҙың "Башҡортостан Республикаһының эсер һәм минераль һыуҙары" программаһы сығыуы бик урынлы булды ул. Халҡыбыҙ үҙебеҙҙең шифалы һыуҙарыбыҙға туйынып ҡалды, хәҙер сауҙа нөктәләрендә ниндәй генә һыуҙар юҡ: "Красноусольская", "Крас-ный ключ", "Чеховская", "Шихан", "Казанчинская", "Приуральская"... — ҡапыл иҫкә төшкәндәрен генә һанағанда ла ике ҡул бармаҡтары етмәй. Һәйбәт сифатлы эсер һәм минераль һыуҙар менән етерлек кимәлдә тәьмин итеү, шифалы һыуҙар сығанаҡтарын рациональ ҡулланыу юлы менән республика халҡының һаулығын һаҡлауҙы төп маҡсат итеп ҡуйған Президент программаһы тормошҡа ашырыла ла инде. Халыҡ һаулығы, юғары тор-мош кимәле өсөн, шөкөр, республика етәкселеге аҡса йәлләмәй. Ошо программа егеттәрҙе һыу табыу һәм ҡойоу заводы асырға этәрә лә. "Программа тормошҡа ашырылырға тейеш. Беҙ ҙә был тәңгәлдә күпме-лер эш күрһәтә алабыҙ, тип, бик уйлап тотондоҡ эшебеҙгә. Халыҡ беҙ етештергән һыуҙы һөйөнөп ала, сифаты ла, хаҡы ла уларҙы ҡәнәғәтләндерә икән, бик шатбыҙ", — ти Азат Фәйзуллин.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эшләү осоронда завод байтаҡ шәфҡәтлелек акция-ларында ла ҡатнашып өлгөргән. "Һыу менән шөғөлләнгән кешеләр тик изгелек тураһында ғына уйларға бурыслы, — тип һөйләй заводтың ге-нераль директоры Юрий Сизинцев. — Өфөләге мәктәп-интернаттарға ярҙам итеп торабыҙ. Республика күләмендә шаулаған төрлө мәҙәни сараларға билеттар алып бүләк итәбеҙ — балалар сәнғәтте, матурлыҡ-ты күреп үҫергә тейеш бит. "Гәлсәр һандуғас" телефестиваленә Фин-ляндиянан махсус саҡырылған ҡунаҡҡа ҡыйбатлы бүләк бирелде. Ғафу-ри районында ҡарттар һәм балалар йорто беҙҙең йылы ҡарашты тойоп йәшәй. Еңеү байрамында ун биш Бөйөк Ватан һуғышы ветеранын ҡунаҡҡа саҡырып алдыҡ. Уларҙың нисек һөйөнгәнен күрһәгеҙ икән, һуғыш хәти-рәләрен һөйләп, йырҙар йырлап, ихлас ултырҙылар яугирҙар. Медицина



*Механик*
*Ғәйнулла Бәхтейәров*

хеҙмәткәрҙәре көнөндә Ҡыуатов исемендәге республика дауаханаһына ”Красноусольская” минераль һыуын һәм башҡа бүләктәр алып барҙыҡ. Хоҙай Тәғәлә биргәнде ниңә мохтаждар менән уртаҡлашмаҫҡа...”

Заводтың үҙендә лә мөхит изге. Эшселәр үҙ эшенә мөкиббән булһалар ҙа, бер-береһенә һис тә йылы мөнәсәбәтен йәлләмәй. Механиктар Ғәйнулла Бәхтийәров менән Андрей Кленовты бында ”кулибиндар” тип йөрөтәләр. Халыҡ таланттары инде улар, ҡулдарынан килмәгән эш юҡ.

— Улар өҫтөндә — ҡорамалдарҙы ҡарау, хеҙмәтләндереү бурысы. Тик егеттәребеҙ шул тиклем эшкә ижади ҡарап өйрәнгән, һәр көн тигәндәй бер нәмә уйлап табып торалар. Ғөмүмән, беҙҙә ирекле рәүештә ижад итергә мөмкин, ләкин төплө уйланылмаған эксперименттарға урын юҡ. Тәүҙә асышты, шулай тип әйтергә яраһа, дөйөм рәүештә тикшерәбеҙ, шунан ғына файҙаланабыҙ. Камиллыҡтың бит сиге юҡ, — тип һөйөнөп һөйләй Салауат Йосопов.

Ысынлап та, егеттәрҙең ҡулы алтын: шешә ҡапҡасы, шешәләрҙе тейәр өсөн транспортер менән бункерҙы үҙҙәре төҙөйҙәр. Ҡайһы бер шешәләрҙә ҡапҡас ябылып етмәй, газ сығыу мөмкинлеген иҫәпкә алып, улар был етешһеҙлекте белдергән тауышлы сигнал уйлап табалар. Һигеҙ газ редукторын тик берәүгә генә тоташтырып, эште еңеләйтеү ысулы менән дә баш ҡатыра ”кулибиндар”. Шулай ҙа, ”етештереүҙә кемдәр айырыуса тырышлыҡ күрһәтә” тигәс, завод етәкселеге кемделер айырып билдәләргә тартынды, сөнки һәр кем бында, алда әйтеүебеҙсә, эшкә намыҫлы һәм яуаплы ҡарай. Руслан Пучков, Руслан Ниғмәтов, Андрей Широков, Артур Нәжметдинов, Азамат Сөләймәнов, Рауил Ғөбәйҙуллин, Вячеслав Запонов һәм башҡалар — һәр кем бында изге эш башҡарыуын аңлай. Исем-шәрифтәргә иғтибар итһәгеҙ, күрәһегеҙҙер, халыҡтар дуҫлығы төйәге лә был — урыҫ, башҡорт, сыуаш, татар бер тирмәгә йыйылып, гөр килә, һыу ҡоя, тормош асылын аңларға тырыша.

...Хушлашыр алдынан мине оҙатып йөрөүсе Салауат Мөхәммәт улы Йосопов ихлас йылмайҙы ла һорап ҡуйҙы:

— Әҙер продукцияны тейәү һәм оҙатыу бүлеге етәксеһе Ришат Фәйзуллин яңы бер идея тәҡдим итте әле. Әйҙә, цехта башҡорт халыҡ йырҙарын, классик музыка өлгөләрен яңғыратып торабыҙ, ти. Һеҙ шуға нисек ҡарайһығыҙ?

Завод менән таныш булмаған башҡа кеше был һорауға аптырап, бик сәйерһенеп ҡуйыр ине. Ә мин, изге, рәхмәтле һәм ижади мөхит менән таныш булғас, ихлас йылмайҙым да:

— Шәп булыр! Һыуға рәхмәт тип өндәшкән кеүек булыр, күңелдәр изгелеккә тулыр, һыу менән бергә халыҡҡа илаһилыҡ та, көй-моң да барып етер, насар уйҙар, боҙоҡлоҡтар беҙҙән китер, — тинем. Хас та шағирҙарса!